муниципальное дошкольное образовательное бюджетное учреждения
детский сад «Одуванчик» с. Зубово муниципального Уфимского района
Республики Башкортостан

**ПРИНЯТО**
**на заседании и педагогически совета**
**МДОБУ детский сад**
**«Одуванчик» с.Зубово**
**Протокол № 1**
**От «29» августа 2025 г.**

**УТВЕРЖДЕНО**
**Заведующий**
**МДОБУ детский сад**
**«Одуванчик» с.Зубово**
**_____ В.В. Тарзимина**
**Приказ № 126-ОД**
**От «29» августа 2025 г**

# ДӘРЕСТӘН ТЫШ ЭШМӘКӘРЛЕК КУРСЫ «УЙНАЙ-УЙНАЙ ҮҪӘБЕҘ» ПРОГРАММАҺЫ

**Автор-составитель: воспитатель**
**Бикбаева Г.Ф.**

Зубово 2025

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ


бит

1. Инеш һүҙ........................................................................................ 3
2. Балалар баҡсаһында уйын эшмәкәрлеге.................................................. 4
3. Уртансы төркөм................................................................................ 6
4. Уртансы төркөм өсөн тематик планлаштырыу.......................................... 9
5. Уртансылар төркөмендә уйнау күнекмәләренең формалашыуын яҡынса билдәләү күрһәткестәре.................................................... 11
6. Уйындар.......................................................................................... 12
7. Ҡулланылған әҙәбиәт......................................................................... 27

# ИНЕШ ҺҮҘ

*Беҙ, беҙ, беҙ инек*

*Беҙ ун ике ҡыҙ инек.*

*Баҙға төштөк, май ашаныҡ,*

*Аҡ келәттә бал ашаныҡ.*

*Бер таҡтаға теҙелдек,*

*Таң атҡансы юҡ булдыҡ!*

Бала саҡ уйындан, уйын бала саҡтан айырылғыһыҙ. Күп ололар уйынды бары тик күңел асыу сараһы тип кенә баһалауса,ә балалар өсөн иһә ул-тотош бер донъя.

Уйындың мәктәпкәсә йәштәге баланың тормошонда төп эшмәкәрлек булараҡ урын биләүе рус ғалимдары Л.С.Выготский, А.Н.Выготский, Д.Б. Эльконин, Л.А.Венгер, В.С. Мухина, Л.Ф. Обухова хеҙмәттәрендә сағыла.

Л.С. Выготский билдәләүенсә, уйын шәхес үҫеше сығанағы булып тора һәм уның яҡын аралыҡта үҫешенә шарттар тыуҙыра: “Бала уйын эшмәкәрлеге аша үҫә. Тик ошо мәғәнәлә генә уйын баланың төп эшмәкәрлеге тип һанала ала,йәғни уйын баланың үҫеш кимәлен билдәләү ролен үтәй”.

А.Н. Леонтьев төп эшмәкәрлекте түбәндәгесә аңлата: “Төп эшмәкәрлек тип, ошо эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә баланың психик үҫешендә ғәйәт ҙур үҙгәрештәрҙең барлыҡҡа килеүе һәм уның яңы үҫеш кимәленә күтәрелә алыуына булышлыҡ итеүсе эшмәкәрлек атала”.

# БАЛАЛАР БАҠСАҺЫНДА УЙЫН ЭШМӘКӘРЛЕГЕ

Бала-сага уйындары шартлыса ике зур төркөмгә буленә: сюжетлы-ролле уйындар һәм ҡағиҙәле уйындар.

Сюжетлы-ролле уйындар башлыса көндәлек көнкүреш һәм йәмғиәт күренештәренә, төҙөлөш һәм төрлө ҡоролмалар менән эш итеүгә бәйле була, тәбиғи материалдар менән уйын ҡороуҙы, күңел асыуҙы һәм театрлаштырылған уйындар уйнауҙы үҙ эсенә ала.

Ҡағиҙәле уйындарҙа дидактик уйындар (предметтар һәм уйынсыҡтар менән уйнау, һүҙле дидактик уйындар, баҫма-өҫтәл уйындары, йырлы-көйлө музыкаль уйындар) һәм хәрәкәтле (сюжетлы, сюжетһыҙ, спорт элементтары менән башҡарылған) уйындар инә.

Сюжетлы-ролле уйындарҙы балалар үҙҙәре уйлап сығара. Уларҙың эстәлегендә балаларҙың тирә-йүн тураһындағы белеме, тәьҫораттары, төшөнсәләре сағылыш таба. Кескәйҙәр уйын барышында үҙ-ара һәм тирә-яҡтағы кешеләр менән аралашыу ҡағиҙәләрен өйрәнә, уйын персонаждары араһында барлыҡҡа килгән төрлө мөнәсәбәттәрҙе ҡороу ысулдарын үҙләштерә.

Һәр бер уйындың темаһы, маҡсаты, сюжеты, йәкмәткеһе һәм ролдәре була. Уйындарҙа балаларҙың алдан күрә белеү, күҙаллау һәләте үҫешә. Улар уйынсыҡтар, төрлө предметтар ярҙамында тирә-йүндәге күренештәрҙе, ваҡиғаларҙы үҙе уйнаған роль аша һүрәтләй һәм күрһәтә белергә өйрәнә, үҙҙәрен ололар тормошонда әүҙем ҡатнашыусы итеп хис итә ала.

Бала уйын аша тормоштағы күренештәрҙе асып биреп кенә ҡалмай, хатта уны үҙе теләгәнсә үҙгәртә, сюжеттың артабан ниндәй йүнәләштә үҫешен күҙаллай.

Ҡағиҙәле уйындарҙың йөкмәткеһе һәм уйын ҡағиҙәләре ололар тарафынан алдан уйланыла. Уларҙың һәр береһендә уйындың маҡсаты, маҡсатҡа ярашлы башҡарыласаҡ хәрәкәттәр тәртибе бирелә.

Ҡайһы бер ҡағиҙәле уйындар ҙа сюжетлы була һәм сюжет буйынса башҡарырға кәрәкле ролдәр талап итә.

Ҡағиҙәле уйындар араһында халыҡ уйындары ҙур урын алып тора. Улар балаларҙын аң-белемен, зиһенен үҫтереү менән бер рәттен ҡыҙыҡлылығы, көләмәслелеге, мәрәкәлелеге менән айырылып торалар. Был уйындар кескәйҙәрҙең хәрәкәтләнеүен үҫтерә, сос, зирек, ҡыйыу, йылғыр, батыр булырға өйрәтә.

Ҡағиҙәле уйындар үҙҙәре ҙур ике төркөмгә булене. Беренсе төркөмгә дидактик уйындар ине. Уларҙын төп маҡсаты булып баланың аҡыл-зиһенен, доньяны танып белеү һәләтен үҫтереү тора. Икенсе төркөмдә хәрәкәтле уйындар үҙ эсенә ала. Был уйындар төрлө хәрәкәттәрҙең башҡарылыу тәртибен нығытыуға һәм кескәйҙәрҙең хәрәкәтләнең әүҙемлеген үҫтереүгә бәйле.

Бөтә был уйындар ҙа баланың фекерләү ҡеүәһен, телмәрен, хәтерен, күҙаллау һәләтен, ихтыяр көсөн үҫтереүгә йүнәлтелгән. Уйындар аша бала шәхес булараҡ формалаша һәм доньяуи әхлаҡи ҡағиҙәләр менән таныша, уларҙы узләштере.

# УРТАНСЫ ТӨРКӨМ

Дүрт-биш йәшлек кескәйҙәрҙең ижади рәүештә уйнауы уҡылған китаптар, телетапшырыуҙар һәм ололар һөйләүе нигеҙендә төрлө яңы темалар менән байый төшә. Уйындарҙың эстәлеге лә тәрәнерәк, ҡыҙыҡлыраҡ була башлай. Балалар бергәләп эшләгәндә бер-береңә ярҙамлашыу кәрәклеген аңлай һәм уйын барышында ошо рәүештә эш итә.

Тәрбиәсенән, был йәш балалары менән уйын эшмәкәрлеген ойоштороғанда, яңы йөкмәткеле уйындарға балаларҙың ҡыҙыҡһыныуын үҫтереү һәм уларҙың үз-ара аралашыуында әхләки ҡанундарҙы дөрөҫ үҙләштереүен күҙ уңында тотоу талап ителә.

Уртансы төркөмгә йөрөгән балалар үҙҙәренең бер-береһенә ҡарата булған ыңғай мөнәсәбәттәре нигеҙендә бәләкәй генә, алты-ете кешенән торған уйын төркөмсәләренә бүленә. Ләкин күп ваҡыт уйын ойоштороғанда төрлө ҡаршылыҡтар килеп тыуа. Сөнки балаларҙың аң-белеменең киңәйеүе һәм уларҙы уйын барышында ҡулланыу өсөн иптәштәренә еткереү теләге уйында төрлө мауыҡтырғыс ҡыҙыҡлы осраҡтарҙы барлыҡҡа килтерә. Эммә уйнаусыларҙың бергәлеп, бер-береһен тыңлап, уйын йөкмәткеһенә ярашлы тейешле эш-хәрәкәт башҡарыу һәләте кәрәкле кимәлде үҫешмәгәнлектән, уйын ваҡытында йыш ҡына балалар араһында аңлашылмаусанлыҡ, упкәләшеу, асыуланыу, үсегеү кеуек күренештәр осрай. Кемдер берәу уйынды ойоштороу буйынса узенен уй-фекере ем планы иң отошло тип һанай. Икенсе бала үҙенең ҡарашын тауыш йәки йоҙроҡ ярҙамында яҡларға тырыша. Үҙ-ара килешеп, бер-береһенең уй-фекеренә, кәңәшенә, теләгенә ҡолаҡ һалып уйнау - был йәш балалары өсөн үтә ауыр эш. Шуға ла куп осраҡта уйын һүнеп ҡала һәм балалар араһындағы мөнәсәбәттәрҙең боҙолоуына килтерә.

Тәрбиәсегә бындай осраҡтар һирәк осраһын өсөн балаларҙы бер-береһенең таҡдимдәренә иғтибарлы булырға һәм хөрмәт менән ҡарарға өйрәтеү кәрәк. Һәр тәкдимдең һәм кәңәштең иң ҡыҙыҡлы өлөшөн һайлап

алырға һәм уйында ҡуллана белергә өйрәтеү - балаларҙың холҡон үҙгәртеүҙә, башҡалар араһында үҙ-үҙен тота белеү ҡағиҙәләрен үҙләштереүҙә ярҙам итәсәк.

Ҡайһы ваҡыт бер үк ролде бер нисә бала уйнарға телей. Был осраҡта ярҙамға тәрбиәсе килә. Ул һәр баланың теләген мөмкин тиклем тормошҡа ашырырға тырышыу юлын эҙләй. Мәҫәлән, «Больница» уйынын уйнайҙар икән. Теүҙә бер генә врач була, уйын йөкмәткеһенең үҫеше һәм балаларҙын уйынға булған ҡыҙыҡһыныуы артыу арҡаһында, тәрбиәсе уйында роль башҡарусылар һанын арттыра: бер бала - балалар врачы, икенсеһе - теш врачы, өсөнсөһе йәнлектәр дауалаусы врач ролен башҡара.

Тәрбиәсе уйын эстәлегенен үҫешенә, ҡатмарланыуына, уйында ҡатнашыусылар башҡарған образдарҙын тәрән фекерле, тормошсан, йор һүҙле булыуына ла иғтибар итә. Ошо маҡсатта ул темаға бәйле фәһемле хикәйәләр укый йәки сюжетлы һүрәттәр күрһәтеп һөйләй. Был алым балаларға уйынды ҡатмарландырып, уны мәғәнәле һәм йөкмәткеле итеп ойоштороу мөмкинлеген бирә. Мәҫәлән, тәрбиәсе больницала төрлө кабинеттар булыуы, унда төрлө врачтар эшлаүе тураһында һөйләй. Һәр врач тик үҙ һөнәренә генә һас булған һауҡтырыу һәм дауалау эш төрҙәрен башҡара һәм ҡоралдар ҡуллана. Тәрбиәсе ошоларҙы аңлатып, һүрәттәр йәки йәнһүрет аша врачтар (рентген врачы, күҙ врачы, теш врачы һ. б.) башҡарған эш-хәрәкәттәрҙе күрһәтеп аңлата – уйын бөтөнләй икенсе төҫ аласаҡ.

Бишенсе йәшкә сыҡкан балаларҙың яраткан ролдәре була. Уйын ваҡытында теге йәки был үҙе яратҡан ролде башҡарып, бала уныц тураһындағы белемдәрен барлай, киңәйтә. Геройҙың уй-фекере, үҙ-үҙен тотоуы, башҡарған эш-хәрәкәте аша бала үҙенең шәхси холоҡ сифаттарын, башҡаларға булған мөнәсәбәттәрен яҡшы яҡка үҫтерә, үҙ-ара аралаша белеү һәләтен күрһәтә.

Уйын эшмәкәрлегенең үҫешенә һәм артабан ниндәй йүнәлештә дауам итә алыуына, балаларҙың тағы ла ниндәй эш-хәрәкәт башҡарып уйнауына тәбиәсенең балалар менән үткәргән әңгәмәләре, персонаждар образын

тулыраҡ итеп асыҡлауы ла этәргес көс булып тора. Тәрбиәсе һәр балаға айырым йомоштар куша ала: өйҙә теге йәки был һөнәр эйәһе тураһында ата – әсәләр менән берлектә һүрәттәр төшөрөү, шиғырҙар, хикәйәләр эҙләү, йомаҡтар, мәҡәлдәр табыу, әҙәби әҫәр өлгөләре уҡыу әңгәмәләшеү һ. б. балаларҙы уйынды матур итеп ҡорорға һәм уйнарға өйрәтә.

Уйын ваҡытында тәрбиәсе үҙе һәр саҡ төп ролде башҡара йәки балалар уйнағанды күҙәтә һәм кәрәкле ваҡытта ярҙамға килә. Кескәйҙәрҙең уйын барышында төрлө уйлап табыуҙарын хупларға, зирәклекте, отҡорлоҡто, үҙаллылыҡты, бер-береһенә ярҙам итә белеүҙе, тиҫтерҙәренең күңелен күрә белеү һәләтен маҡтап, телгә алып тора.

Балалар күп ваҡыт әҙер уйынсыҡтар менән уйнап ҡәнәғәтләнмәй. Йыш ҡына уларҙын үҙ аллы уйын кәрәк-яраҡтары эшләү теләге тыуа. Үҙ ҡулдары менән эшләнгән уйынсыҡ бала өсөн ҡыҙыҡлыраҡ була һәм уйын барышына ыңғай тәьҫир итә.

## УРТАНСЫ ТӨРКӨМ ӨСӨН ТЕМАТИК ПЛАНЛАШТЫРЫУ

| № | Дәрес темаһы | Сәғәт һаны | Иҫкәрмәләр |
|---|---|---|---|
| 1. | Инеш дәрес. | 1 | |
| | **Хәрәкәтле уйындар.** | | |
| 2. | Самолеттар. | 1 | |
| 3. | Йылға аша һикереп сыҡ. | 1 | |
| 4. | Балдаҡты (ҡулсаны) ташла. | 1 | |
| 5. | Йәшерәм яулыҡ. | 1 | |
| 6. | Турғайҙар һәм автомобиль. | 1 | |
| 7. | Үҙеңә пар тап. | 1 | |
| 8. | Тупты бау аша ташла. | 1 | |
| 9. | Сәп. | 1 | |
| 10. | Кем көслөрәк? | 1 | |
| 11. | Трамвай. | 1 | |
| 12. | Алырмын ҡош, бирмәм ҡош. | 1 | |
| 13. | Төлкө кетәктә. | 1 | |
| 14. | Бесәй балалары һәм көсөктәр. | 1 | |
| 15. | Атлылыр эстафетаһы. | 1 | |
| | **Дидактик уйындар** | | |
| 16. | Нимәгә кәрәк? | 1 | |
| 17. | Мин тәҙрә аша нимә күрәм? | 1 | |
| 18. | Йәшелсәләр, емештәр. | 1 | |
| 19. | Беҙ ни эщләгәнде әйтмәйбеҙ, ә күрһәтәбеҙ. | 1 | |
| 20. | Был ҡасан була? | 1 | |
| 21. | Һәр йәшелсәгә – япрағы, һабағы. | 1 | |
| 22. | Серле һүрәттәр. | 1 | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 23. | Кем иң күп белә? | 1 | |
| 24. | Уйла һәм әйт. | 1 | |
| 25. | Уйысыктарҙы сағыштыр. | 1 | |
| 26. | Нимәнең балаһы? | 1 | |
| | **Сюжетлы – ролле уйындар** | | |
| 27. | Магазин. | 1 | |
| 28. | Больница. | 1 | |
| 29. | Аптека. | 1 | |
| 30. | Зоопарк. | 1 | |
| 31. | Ғаилә. | 1 | |
| 32. | Сәс алыусы. | 1 | |
| 33. | Китапхана | 1 | |
| 34. | Мәктәп | 1 | |
| Бөтәһе 34 сәғәт. | | | |

# УРТАНСЫЛАР ТӨРКӨМЕНДӘ УЙНАУ КҮНЕКМӘЛӘРЕНЕҢ ФОРМАЛАШЫУЫН ЯҠЫНСА БИЛДӘЛӘҮ КҮРҺӘТКЕСТӘРЕ

- ✓ Уйында үҙаллылыҡ, ныҡышмалылыҡ, ихтыяр көсө күрһәтә.
- ✓ Уйын сюжетына үҙ аллы өҫтәмә индерә.
- ✓ Тәрбиәсе менән берлектә уйналған сюжетлы-ролле уйындарҙа ҡатнашып уйнай ала, сюжет буйынса диалогтар ҡора бела.
- ✓ Ниндәй уйын уйнау һәм ҡоролмалар төҙөү кәрәклеге тураһында алдан бергәләп һөйләшә, кәңәшләшә белә.
- ✓ Тиҫтерҙәренең теләгенә һәм кәңәшенә ҡолаҡ һала.
- ✓ Театрлаштырылған уйындарҙа образлы уйынсыҡтар һәм бармаҡ ҡурсаҡтарын ҡуллана белә, телмәрҙе тасуири саралар ҡуллана (интонация, мимика, ишара).
- ✓ Туп, һикергес, ҡоршау менән уйнай белә.
- ✓ Һамаҡ ярҙамында уйын алып барыусыны һайлай белә.
- ✓ Дидактик уйындарҙа предметтың сифатын билдәләй, тышҡы билдәләр буйынса уларҙы сағыштыра белә.
- ✓ Өлөштәрҙән бөтөндө йыя (кубиктар, мозаика, пазлдар ярҙамында)
- ✓ Предметты ҡапшап, тәмләп, тыңлап, тауышы аша билдәләй.

# УЙЫНДАР

**Хәрәкәтле уйындар**

Уйын эшмәкәрлеге урта төркөм балаларыныңзур урын биләп тора. Уртансы төркөмдә уйындар яңыра, ҡатмарлаша.уйындарҙа балаларҙың сәләмәтлеген нығытыу саралары дауам ителә, кәүҙәне дөрөҫ тотоуға,әҙәп-гигиена ҡағиҙәләренә өйрәтеүгә, организмды нығытыуға төрлө күнекмәләр үткәрелә. Балалар мәргәнлеккә, сослоҡка өйрәнә, ҡул хәрәкәттәренең етеҙлеге үҫтерелә.

Хәрәкәтле һәм халыҡ уйындары балаларҙа дуҫлыҡ тойғоһо, үҙ көсөнә ышаныу, иғтибарлылыҡ, сослоҡ, түҙемлелек тәрбиәләй.

**Самолеттар**

**Маҡсат:** бөтә майҙан буйлап бәрелешмәй хәрәкәт итергә, йүгерергә күнекмәләр үткәреү, иғтибарҙы, етеҙлекте үҫтереү. Сигнал буйынса хәрәкәт итергә өйрәтеү.

**Уйын барышы:** балалар 3-4 рәткә теҙелә. Улар – осоусылар. Тәрбиәсенең: "Осоуға әҙерләнергә!" – тигән сигналы буйынса улар ҡулдары менән мотор әйләнгән хәрәкәттәр эшләйҙәр. “Осоғоҙ” – тигәс, балалар ҡулдарын йәйеп, ирекле “осоп” йөрөйҙәр. “Ултырырға” –тигән сигнал буйынса балалар колонналарға теҙеләләр һәм бер тубыҡтарына сүгеп ултыралар.

Тәрбиәсе ҡайһы колонна алдан теҙелә, шуны билдәләй. Уйын 3-4 тапҡыр ҡабатлана.

**Йылға аша һикереп сыҡ**

**Маҡсат:** урындан алға табан һикереүгә күнекмәләр. Һикергәндә ергә дөрөҫ төшөргә, кәүҙә торошоноң тигеҙлеген һаҡларға өйрәтеү.

**Уйын барышы:** майҙансыкта бер осо нәҙек, ә артабан киңәйә барған йылға һыҙыла (киңлеге 10 см-ҙан 40 см-ға тиклем).балаларға йылға аша

һикерергә тәкдим ителә. Башта – нәҙек осонан, шунан - киңерәк урындан, аҙаҡ –иң киң еренән. Тәрбиәсе иң киң ерҙән һикерә алған балаларҙы билдәләй.

**Балдаҡты (ҡулсаны) ташла**

**Маҡсат:** 1,5 – 2 м алыҫлыҡтан балдаҡтарҙы (ҡулсаларҙы) төҙләп, сәпкә ташларға өйрәтеү, күҙ ҡарашы ярҙамындааралыҡты билдәләй белеүҙе, мәргәнлекте үҫтереү.

**Йыһаз:** балдаҡтар (ҡулсалар), ҡулсаларҙы ташлау өсөн фигуралар (фил, ҡаҙ.тәпәйен күтәреп ултырған ҡуян йәки таяҡсалар).

**Уйын барышы:** фигуранан 1,5 – 2 м алыҫлығында һыҙыҡ һыҙыла, балалар ошо һыҙыҡтан балдаҡдаҡтарҙы ташлайҙар. Тәрбиәсе дөрөҫ торорға, балдаҡты дөрөҫ ташларға өйрәтә.

**Йәшерәм яулыҡ**

**Маҡсат:** балаларҙың иғтибарын, етеҙлеген үҫтереү, башҡорт халыҡ уйыны менән таныштырыу.

**Уйын барышы:** балалар түңәрәк яһап ултыралар, араларынан көтөүсе һайлана. Ул ҡулына яулыҡ ала. Балалар йырлай:

Йәшерем – йәшерем яулығымды
Йәшел ҡайын аҫтына.
Һиҙҙермәйсә һалып китәм
Бер иптәшем артына.

Көтөүсе булған бала түңәрәкте уратып йөрөй һәм бер уңайлы ваҡытта һиҙҙермәй генә яулыҡты бер иптәшенең артына һалып китә. Ә үҙе һаман яулыҡты йәшереп тотҡан һымаҡ йөрөй.

Артында яулыҡ ятҡан бала, көтөүсе түңәрәкте әйлйнеп килгәнсе, үҙенең артында яулыҡ ятҡанын һиҙмәй ултырһа, көтөүсе уның янына килеп

еткәс, яулыҡты ала ла уға яулыҡ менән һуға. Был бала көтөүсе булып ҡала. Әгәр ҙә түңәрәктәге бала артына яулыҡ һалынғанын һиҙеп ҡалһа, ул тиҙ генә тороп, көтөүсе артынан йүгерә. Ә көтөүсе , яулыҡтан һуғылмаҫ өсөн, түңәрәк буйлап йүгереп, уны баҫтырған иптәшенең урынына ултырырға тырыша. Әгәр ултырып өлгөрмәһә, ул тағы көтөүсе була һәм уйын яңынан башлана.

**Турғайҙар һәм автомобиль**

**Маҡсат:** балаларҙың иғтибарын, етеҙлеген үҫтереү; уйын ваҡытында йүгереүгә,һикереүгә күнекмәләр үткәреү; һикергәндә ике аяҡҡа дөрөҫ төшөргә, сигнал менән хәрәкәт итеүгә өйрәтеү.

**Йыһаз:** машина рүлдәре, эскәмйә( 10 -15 см бейеклектә).

**Уйын барышы:** балалар араһынан "автомобиль" һайлана. Турғай булған балалар эскәмйәләрҙә торалар. Тәрбиәсенең сигналы буйынса улар һикереп төшөп, майҙансыҡ буйлап иркле йүгереп, ҡулдарын йәйеп, һикереп йөрөйҙәр. Автомобиль килеп сыҡҡас, турғайҙар ояларына ҡасалар. Уйын ҡабатлана.

**Үҙеңә пар тап**

**Маҡсат:** балаларҙың иғтибарын, етеҙлеген, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** ике төҫтәге бәләкәй байраҡтар.

**Уйын барышы:** балаларға берешәр кескәй байраҡ таратып бирелә: ярты төркөмгә бер төҫлө, икенсе яртыһына – икенсе төҫлө. Сигнал буйынса балалар таралып йүгерәләр. "Парҙарығыҙҙы табығыҙ!"- тигән сигнал буйынса бер төҫлө байраҡтары булған балалар бер урынға, икенсе төҫтәге байраҡтар тотҡан балалар икенсе урынға йыйыла. Ҡайһы төркөм алдан йыйыла, ул –еңеүсе. Сигнал буйынса уйын бер нисә тапҡыр ҡабатлана.

**Тупты бау аша ташла**

**Маҡсат:** балаларҙың иғтибарын, мәргәнлеген, ҡул хәрәкәтенең етеҙлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** ҙур туп, балаларҙың күкрәк тәңгәлендә һуҙылған бау, бауҙан 1м алыҫлыҡта ике яҡтан да һыҙыҡ һыҙылған.

**Уйын барышы:** балалар ике яҡтан һыҙыҡ буйлап ҡапма – ҡаршы теҙеләләр. Ситтә торған баланың береһенә туп бирелә. Тәрбиәсенең сигналы буйынса ул ҡаршыһында торған балаға туп ташлай (бау аша).

Тупты тотҡан бала ҡаршы яҡтан икенсе торған балаға тупты ташлай, уйын шулай дауам итә. Тәрбиәсе хаталарын әйтеп өйрәтеп тора.

**Сәп**

**Маҡсат:** мәргәнлекте, ҡул хәрәкәттәренең етеҙлеген, ҡараш ярҙамында аралыҡты билдәләй белеү һәләтен, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** диаметры 1 м булған фанерҙан эшләнгән сәп, йомарланған ҡарҙар.

**Уйын барышы:** балалар сәптән 4 -5 м алыҫлыҡта теҙелеп торалар. Улар уйын башланғас, сиратлап, ҡарҙарҙы сәпкә төҙәп бәрә башлайҙар. Кемдең ҡар тубы үҙәктәге түңәрәккә тейә, шул күберәк мәрәй ала.

**Кем көслөрәк?**

**Маҡсат:** сослоҡто, иғтибарлылыҡты, етеҙлекте, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү; дуҫлыҡ тойғоһо тәрбиәләү.

**Уйын барышы:** балалар ике тигеҙ төркөмгә бүленә. Һыҙыҡ һыҙыла. Ике төркөм һыҙыҡтың ике яғында тора. Һыҙыҡ өҫтөндә ҡапма –ҡаршы һәр төркөмдөң башлығы бер – береһенә ҡаршы тора. Улар бер - береһенең ҡулын ныҡ итеп тоталар, ә башҡа иптәштәре улар артынан теҙелешә.

Сигнал буйынса һәр төркөмдөң уйнаусылары бер – береһенең биленән тотошоп, һыҙыҡ аша тартыша башлай.

Ҡайһы яҡ балалары ҡаршы төркөмдә үҙ яғына һөйрәп сығара, шул яҡ - еңеүсе.

**Трамвай**

**Маҡсат:** балаларҙың иғтибарын, етеҙлеген, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү; сигнал буйынса хәрәкәт итергә өйрәтеү; светофорҙың төҫө һәм тәғәйенләнеше менән таныштырыу.

**Йыһаз:** ике бер тигеҙ оҙонлоҡтағыоҙон бау; йәшел, һары, ҡыҙыл төҫтәге байраҡтар.

**Уйын барышы:** балалар парлашып колоннаға теҙелеп, етәкләшеп торалар. Улар остары бергә бәйләнгән бауҙың эсендә, буш ҡулдары менән бауҙы тотоп торалар. Йәшел төҫтәге байраҡ күтәрелһә, балалар йүгерәләр – трамвай ҡуҙғалды. Әгәр һары йәки ҡыҙыл төҫтәге байраҡтар күтәрелһә, балалар туктап, йәшел ут янғанды көтөп торалар.

Трамвайҙы икенсе транспорт төрө менән алыштырырға була.

**Алырмын ҡош, бирмәм ҡош**

**Маҡсат**: иғтибарлылыҡты, сослоҡто, етеҙлекте, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү; ойошҡанлыҡ тәрбиәләү.

**Уйын барышы:** уйында "каҙ", уның "бәпкәләре" һәм "төйлөгән" ҡатнаша. Төйлөгән булған бала ерҙе соҡоп ултыра. Ҡаҙ бәпкәләрен эйәртеп, уның эргәһенә килә һәм:

- Төйлөгән, төйлөгән, ни эшләйһең? – тип һорай.

Төйлөгән:

- Бына һинең балаларыңды атып тоторға ултырам, - ти.

Ҡаҙ:

- Мин һиңә балаларымды бирмәйем! – ти.

Төйлөгән урынынан тора ла:

- Алам, алам атар ҡош! – тип ҡаҙ бәпкәләренә ташлана.

Ҡаҙ:

- Бирмәм, бирмәм, битәр ҡош! – тип,бәпкәләрен ҡурсалай башлай. Ә

бәпкәләр, ҡаҙ артынан бер-бер артлы тотоношоп: “Сип-сип-сип”, - тип йөрөйҙәр. Төйләгәндең ҡулы тейгән бала уйындан сыға бара. Уйын ҡаҙ бәпкәләре тотолоп бөткәнсе дауам итә.

**Төлкө кетәктә**

**Маҡсат:** балаларҙы эскәмйәнән һикереп төшөргә, һикергәндә ике аяҡҡа дөрөҫ төшөргә, кәүҙә торошо тигеҙлеген һаҡларға өйрәтеү; иғтибарлылыҡты, етеҙлекте, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** эскәмйәләр (10-15 см бейеклектә).

**Уйын барышы:** балалар араһынан “төлкө” һайлана. Тауыҡ булған балалар кетәктә –эскәмйәлә торалар. Төлкө ситтә ултыра.. Тәрбиәсенең сигналы буйынса, тауыҡтар һикереп төшәләр ҙә ихата буйлап йүгереп йөрөйҙәр, ҡанат ҡағыналар, ем суплəйҙәр.

“Төлкө килә!” – тигән сигнал буйынса улар кетәккә ҡасалар. Ҡасып өлгөрмәгәнен төлкө өңөнә алып ҡайта. 2-3 тауыҡ тотолғас, төлкөнө алмаштырырға була.

**Бесәй балалары һәм көсөктәр**

**Маҡсат:** балаларҙы эскәмйә аҫтынан имгәкләп шыуышырға, гимнастика стенкаһына үрмәләргә өйрәтеү; иғтибарлылыҡты, етеҙлекте, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** гимнастика стенкаһы, 50 см бейеклегендәге эскәмйә йәки һуҙылған бау, башлыҡтар.

**Уйын барышы:** уйын гимнастика стенкаһы булған бүлмәлә үткәрелә. Балалар ике төркөмгә бүленәләр. Тәүге төркөм – бесәйҙәр, улар эскәмйә алдында. Икенсе төркөм –көсөктәр, улар эскәмйә артында.

Тәрбиәсе бесәйҙәргә әкрен генә йүгерергә тәҡдим итә. “Көсөктәр” сигналы буйынса көсөк булған балалар эскәмйә йәки һуҙылған бау аҫтынан шыуышып сығып, имгәкләп, бесәйҙәрҙе баҫтыралар. Бесәйҙәр гимнастика стенкаһына үрмәләп менәләр.

Көсөктәр ояларына ҡайталар. 2 -3 тапҡыр уйнағас, балалар ролдәр менән алмашына.

**Атлылар эстафетаһы**

**Маҡсат:** балаларҙа ойошҡанлыҡ, бер-береһе менән эш итә белеү һәләтлелеге тәрбиәләү; етеҙлекте, сослоҡто, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** 2 м оҙонлоғондағы ептәр.

**Уйын барышы:** балалар сафҡа теҙелеп, бер нисә төркөмгә бүленеп, һыҙыҡ артына баҫалар. Берәүҙәре - "ат", икенселәр – "һыбайлылар". Улар еп менән аттарҙы егеп алалар һәм сигнал буйынса "на-на!" тип аттарҙы ҡыуа-ҡыуа, билдәләнгән маршрут менән сабалар. Былар әйләнеп килгәс, икенсе атлылыр маршрутҡа сыға. Ҡайһы төркөм тиҙерәк һәм яңылышмай уйнай, шул еңеүсе була.

**Дидактик уйындар**

**Нимәгә кәрәк?**

**Маҡсат:** балаларҙы тирә-йүндәге предметтарҙың сифаттары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Ул предметтарҙың ҡулланылғанын күрә, аңлата белергә өйрәтеү. Иғтибарлылыҡ, бәйләнешле телмәр үҫтереү.

**Йыһаз:** сынаяҡ, күҙлек, ҡармаҡ, саңғы, сүкеш төшөрөлгән һүрәттәр йәки предметтар.

**Уйын барышы:** балалар ярымтүңәрәк яһап ултыралар. Тәрбиәсе фланелеграфҡа төрлө предметтар төшөрөлгән һүрәттәрҙе берәмләп ҡуя:

- Балалар, был нимә?
- Сынаяҡ.
- Ул нимә өсөн кәрәк,Айгөл?
- Сәй эсергә.
- Кем өҫтәп әйтер, тағы ла нимәне сынаяҡҡа ҡойоп эсеп була?
- Кофе, һөт, ҡатыҡ, кисель, компот һ.б.

Шул рәүешле тәрбиәсе башҡа предметтарҙы күрһәтә һәм уларҙыңҡулланылышы тураһында балаларҙан һорай.

**Мин тәҙрә аша нимә күрәм?**

**Маҡсат:** балаларҙы төрлө предметтарҙың төҫөн күрә, айыра, бер-береһе менән сағыштыра белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Фекерләү һәләтен, телмәр, зиһен һәм хәтер үҫтереү.

**Йыһаз:** 10 x 7 см ҙурлыҡтағы төрлө төҫтәге тура дүртмөйөш, картондан тәҙрә рамы силуэты, фланелеграф.

**Уйын барышы:** балалар ярымтүңәрәк яһап ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе фланелеграфҡа тәҙрә рамын ҡуя һәм:

- Балалар, был нимә ул? – тип һорай. Балалар:
- Тәҙрә.
- Эйе, дөрөҫ, ул ниндәй геометрик фигураға оҡшаған?
- Тура дүртмөйөшкә.
- Был тура дүртмөйөш ниндәй төҫтә?
- Йәшел.
- Тимәк, балалар, беҙ хәҙер тәҙрә аша тик йәшел төҫтәге предметтарҙы күрәбеҙ. Тирә-яҡҡа ҡарағыҙ әле, йәшел төҫтәге нимәләрҙе күрәһегеҙ?
- Туп, кубиктар, салфетка, алъяпҡыс (һ.б. предметтарҙы балалар һанап сығалар).

Шул рәүешле балалар ҡыҙыл, күк, һары, аҡ төҫтәге предметтарҙы әйтеп сығалар.

**Йәшелсәләр, емештәр**

**Маҡсат:** балаларҙы йәшелсә-емештәрҙе айыра, дөйөмләштерә белергә өйрәтеү. Телмәр, хәтер, зирәклекте үҫтереү.

**Йыһаз:** туп.

**Уйын барышы:** балалар эскәмйәлә йә ултырғыста бер рәткә теҙелеп ултыралар. Беренсе ултырған балаға тәрбиәсе туп бирә һәм “йәшелсә” тип

әйтә. Бала “помидор” тип тупты күршеһенә бирә. Теҙелешеп ултырған балалар йәшелсәләрҙе әйтеп, тупты бер-береһенә тапшыралар.

Рәттә иң һуңғы булып ултырған бала тупты ала ла, емештәрҙе һанар өсөн уйынды башлап, бер емештең атамаһын әйтә һәм тупты кире рәт буйлап ебәрә.

**Беҙ ни эшләгәнде әйтмәйбеҙ, ә күрһәтәбеҙ**

**Маҡсат:** балаларҙың фекерләү һәләтен, зиһенен, зирәклекте үҫтереү. Һүҙ байлыҡтарын үҫтереү, белемдәрен тулыландырыу.

**Уйын барышы:** балалар ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе уйындың шартын аңлата. Бер бала бүлмәнән ишек артына сыға. Башҡалар, үҙ-ара шым ғына һөйләшеп-кәңәшләшеп, берәй эште белдергән хәрәкәтте (имитация) эшләп ҡарайҙар. Мәҫәлән: пианино уйнаған, сәс тараған, ҡурсаҡ йоҡлатҡан,иҙән һепергән һ.б. Тәрбиәсе ишек артындағы баланы саҡырып индерә һәм, бала ингәс, ултырғыстағы балаларҙан:

- Һеҙ нимә эшләнегеҙ? – тип һорай.

Ә башҡалар: “Беҙ ни эшләгәнде әйтмәйбеҙ, ә күрһәтәбеҙ!” – тип, алдан уйланылған хәрәкәтте күрһәтәләр. Әгәр бала дөрөҫ яуап бирһә, ул ултырғысҡа ултыра, яңылышһа, яңынан ишек артына сыға. Уйын яңынан дауам итә.

**Был ҡасан була?**

**Маҡсат:**балаларҙың йыл миҙгедәре тураһындағы белемдәрен тулыландырыу, төрлө йыл миҙгелендә йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәттәге үҙгәрештәр менән таныштырыуҙы дауам итеү.

**Йыһаз:** төрлө йыл миҙгелен сағылдырған төҫлө һүрәттәр, йәшел, ҡыҙыл, аҡ төҫтәге түңәрәктәр.

**Уйын барышы:** тәрбиәсе берәй йыл миҙгелен сағылдырған һүрәтте күрһәтә. Мәҫәлән: “Көҙгө урман.Һары япраҡтар ерҙә яталар”. Балалар ошо һүрәткә ярашлы рәүештә һары түңәрәкте күрһәтә.

Әгәр ҡыш миҙгеле булһа – аҡ, йәй –ҡыҙыл, яҙ йәшел төҫтәрҙе күрһәтергә тейештәр. Уйын алдынан тәрбиәсе иң алда һәр төҫтөң ниндәй йыл миҙгелен аңлатҡанлығын балалар менән бергәләп асыҡларға тейеш.

**Һәр йәшелсәгә –япрағы, һабағы**

**Маҡсат:** балаларҙы йәшелсәләрҙе уларҙың япраҡтары, төҫтәре, формалары буйынса айыра һәм таный белергә өйрәтеү. Телмәрҙе, зиһенде һәм хәтерҙе үҫтереү.

**Йыһаз:** 2 ҡумта, уның береһендә –йәшелсәләр һүрәте төшөрөлгән һүрәттәр, икенсеһендә –уларҙың һабаҡтары менән япраҡтары.

**Уйын барышы:** балалар өҫтәл артында. Тәрбиәсе өҫтәлгә ике ҡумталағы һүрәттәрҙе лә һала ла, йәшелсәләрҙең һабаҡтары менән япраҡтарын табып, уларҙы ҡуйырға тәҡдим итә. Аҙаҡ ниндәй йәшелсә икәнен, япрағы ниндәй төҫтә, формала һ.б. тураһында һөйләй.

**Серле һүрәттәр**

**Маҡсат:** балаларҙың йорт һәм ҡырағай хайуандар тураһындағы белемдәрен тулыландырыу, дөрөҫ итеп һанарға өйрәтеүҙе дауам итеү. Телмәрҙе, зиһенде һәм хәтерҙе үҫтереү.

**Йыһаз:** ҡумтала төрлө йорт һәм ҡыр хайуандары төшөрөлгән карточкалар (һәр карточкала берҙән бишкә тиклем генә һүрәттәр).

**Уйын барышы:** балалар өҫтәл тирәләп ултыра. Тәрбиәсе ҡумтанан алып карточкаларҙы өҫтәлгә һүрәттәрен әйләндереп һала. Балаларҙың һәр береһе карточканы ала, әйләндереп ҡарай һәм унда ниндәй хайуан төшөрөлөүен, йорт йәки ҡыр хайуанымы, нисә хайуан икәнлеген, уларҙың үҙенсәлекле холоҡ-сифаттарын әйтеп бирәләр.

**Кем иң күп белә?**

**Маҡсат:** балаларҙы предметтарҙы дөйөмләштерә белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Телмәрҙе, зиһенде һәм хәтерҙе үҫтереү.

**Йыһаз:** бәләкәй туп.

**Уйын барышы**: балалар ярымтүңәрәк яһап ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе улар ҡаршыһында, уның ҡулында бәләкәй туп.

Тәрбиәсе уйындың шартын аңлата: ул тупты балаларға биргәндә берәр ниндәйҙер бер дөйөмләштерелгән һүҙҙе әйтә һәм был дөйөмләштереүсе һүҙҙәр төркөмөнә ингән нәмәне атай. Мәсәлән,Тәрбиәсе: "Уйынсыҡтар",-тип әйтә. Шунан: "Ҡурсаҡ", -тип тупты ултырғыста беренсе булып ултырған балаға бирә. Унан шул рәүешле дауам итә. Бер үк һүҙҙе әйтергә ярамай. Икенсе дөйөмләштереүсе һүҙҙәр теҙмәһен алырға мөмкин (һаут-һаба,өс, баш, аяҡ кейемдәре, бүлмә йыһаздары, йәшелсәләр һ.б.)

**Уйла һәм әйт**

**Маҡсат:** балаларҙы тирә-йүндәге, йәнле һәм йәнһеҙ тәдиғәттәге үҙгәрештәрҙе аңлы рәүештә күрә, аңлай белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Төлө предметтарҙың төҫтәре, формалары, сифаттары менән таныштырыу. Шул уҡ билдәләр буйынса уларҙы айыра һәм таный белергә өйрәтеү. Телмәрҙе, хәтерҙе һәм зиһенде үҫтереү.

**Йыһаз:** предметлы һәм сюжетлы һүрәттәр һәм төрлө предметтар.

**Уйын барышы:** балалар өҫтәл артында ултыралар. Тәрбиәсе улар алдында. Ул балаларға төрлө һорауҙар бирә:

- Төҫтәре буйынса ҡар һәм тупраҡ нисек айырылалар? (һүрәттәр күрһәтә.)

- Мамыҡ менән ағас?

-Ҡайһы ваҡытта ағастар япраҡ яра? Ҡайһы ваҡытта ҡойола?

**Уйынсыҡтарҙы сағыштыр**

**Маҡсат:** балаларҙы төрлө предметтарҙы уларҙың бейеклектәре буйынса сағыштыра белергә өйрәтеү. Уларҙы төҫтәре, формалары буйынса сағыштыра белергә өйрәтеү. Уларҙы төҫтәре, формалары буйынса айыра һәм таный белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Тирә-йүндәге предметтарға,

уйынсыҡтарға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Телмәрҙе, хәтерҙе һәм зиһенде үҫтереү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ, пирамидка, уйынсыҡ бәшмәк, өҫтәл, ултырғыс –бөтәһе лә икешәр һәм төрлө бейеклектәге уйынсыҡтар.

**Уйын барышы:** балалар өҫтәл артында ултыра. Тәрбиәсе уйынсыҡтарҙы парлап күрһәтә. Мәҫәлән,ике пирамидка. Уның береһе бейек, ә икенсеһе – тәпәш. Балалар уларҙы сағыштырып, ҡайһыһы бейек, ҡайһыһы тәпәш икәнлеген билдәләй.

Шундай тәртиптә ҡурсаҡтар сағыштырыла. Ҙур ҡурсаҡты –бейек ултырғысҡа, бейек өҫтәл артына, бәләкәй ҡурсаҡты тәпәш өҫтәл һәм ултырғысҡа ултырталар. Ни өсөн улай кәрәклеген балалар үҙҙәре аңлатып һөйләйҙәр.

**Нимәнең балаһы?**

**Маҡсат:** балаларҙың йорт хауандары һәм йорт ҡоштары тураһындағы белемдәрен асыҡлау, киңәйтеү. Хайуандарға ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Телмәрҙе, зиһенде һәм хәтерҙе үҫтереү.

**Йыһаз:** фланелеграф, йорт хайуандары һәм ҡоштары, уларҙың балалары булған айырым төҫлө һүрәттәр.

**Уйын барышы**: балалар өҫтәл артында. Улар алдында фланелеграф. Иң тәүҙә тәрбиәсе менән бергәләп йорт ҡоштарын, йорт хайуандарын һанап, әйтеп сығалар. Шунан тәрбиәсе: “Быҙау”, -тип әйтеүгә, балалар: “Һыйыр”, -тип яуап ҡайтаралар һәм өҫтәлдән һыйыр менән быҙау төшөрөлгән һүрәттәрҙе алып, уларҙы фланелеграфҡа урынлаштыралар.

**Сюжетлы-ролле уйындар**

Балаларҙа төрлө уйындарға ҡыҙыҡһыныу уятыу, бер-береһе менән кәңәшләшеп, дуҫ һәм татыу уйнарға өйрәтеү. Сюжетлы-ролле уйындарҙың йөкмәткеһе яңынан-яңы күренештәр (сюжеттар) менән тулыландырып торолорға тейеш. Уйнар өсөн төркөмдә эре төҙөлөш материалдары һәм

шулай ук башка кәрәкле материалдар булдырырға кәрәк. Уларзы балалар теләгән ваҡытта алып, уйнағандан һуң урынына ҡуйырлыҡ булһын.

Тәрбиәсе уйынды күҙәтеп кенә торорға тейеш тугел, уны тейешле йүнәлешкә бороп, төзәтмә индерергә тейеш.

**Магазин**

**Максат:** иҫәпте нығытыу (таяҡсалар, түңәрәктәр). Һатыусы һөнәренә ҡыҙыҡһыныу һәм хөрмәт тәрбиәләү. Йәмәғәт урындарында үҙ-үҙеңде тота белергә өйрәтеү, телмәр үҫтереү.

**Йыһаз**: уйынсыҡтар, витриналар, касса, аҡ халат, «аксалар», дәрестә әҙерләнгән «печенье һәм йәшелсәләр».

**Ҡағиҙәһе:** ролдәрҙе бүлеуү: һатыусы, кассир, машина йөрөтөүсе, эшселәр, һатып алыусылар. Тулы һөйләмдәр менән һөйләшеү. Иҫәпте дөрөҫ алып барыу. Бер-береңә итәғәтле булыу.

**Больница**

**Маҡсат**; врач һөнәренә ҡыҙыҡһыныу һәм хөрмәт тәрбиәләү. Йәмәғәт урындарында үҙ-үҙеңде тота белергә өйрәтеү, телмәр үҫтереү.

**Йыһаз:** аҡ халат, аҡ ҡалпаҡ, фонедоскоп, шпатель, градусник, эсендә «дарыу» ятҡан төрлө бәләкәй картон ҡумталар, кушетка, рецепт язуу өсөн ҡағыҙҙар, ручка, энәһеҙ шприцтар, мамык йомарсыҡтар, бинт.

**Ҡағиҙәһе:** ролдәрзе бүлеү: «врач», «ауырыу». Тулы һөйләмдәр менән һөйләшеү. Бер-береңе иғтибарлы булыу.

**Аптека**

**Маҡсат;** дарыу һатыусы (провизор) һөнәренә ҡыҙыҡһыныу һәм хөрмәт тәрбиәләү Йәмәғәт урындарында үҙ-үҙеңде тота белергә өйрәтеү, телмәр үҫтереү.

**Йыһаз:** витриналар, касса, аҡ халат, «аҡсалар», дәрестә әҙерленгән «рецепттар, дарыуарҙар, дарыу үләндәре төрөлгән ҡаптар» һ. б.

**Ҡағиҙәһе:** ролдәрҙе бүлеү: аптекарь, кассир, машина йөрөтөүсе, һатып алыусылар. Тулы һөйләмдәр менән һөйләшеү. Иғтибарлы, итәғәтле булыу.

**Зоопарк**

**Маҡсат:** иҫәпте нығытыу, балаларҙы зоопарк хезмәткәрзәренең эше менән таныштырыу; хайуандарҙы тәрбиәлеү тәртибе менән таныштырыу; башҡарған эштәре тураһында эҙмә-эҙлекле, бәйләнешле итеп һөйләргә өйрәтеү.

**Йыһаз:** 12-15 бер төрлө ҙурлыҡтағы хайуандар-уйынсыҡтар, төҙөлөш материалдары һәм башҡа кәрәк-яраҡтар: биҙрәләр, сепрәк, тастар йәки ялғаштар.

**Ҡағиҙәһе:** ролдәрҙе бүлеү: зоопарк хеҙмәткәрҙәре, төҙөүселәр, зоопарк етәксеһе, врачтар, кухня эшселәре, хайуандарҙы оҙатыусылар. Оҙатыусы нисә хайуан алып килгәнен иҫләргә тейеш. Етәксе хеҙмәткәрҙәрҙән нисә хайуанды ашатҡанын, йыуындырғанын белешеп тора. Үҙҙәре башҡарған эште һөйләй белеү.

**Ғаилә**

**Маҡсат**: ғаилә ағзаларына иғтибар, һөйөү тәрбиәләү, бер-береңә ҡарата иғтибарлы булыу; башҡарған эштәре тураһында эҙмә-эҙлекле, бәйләнешле итеп һөйләргә өйрәтеү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ мөйөшөндә уйнарға мөмкин; ролдәр үҙ аллы, балалар теләгәнсе бүленә (атай, әсәй, өләсәй, олатай һ. б.).

**Ҡағиҙәһе:** һәр кем үҙ ролен еренә еткереп, тулыландырып башҡарырға тейеш.

**Сәс алыусы**

**Маҡсат:** сәс алыусы һөнәре менән таныштырыу. Уйын өсөн кәрәк булған атрибуттарҙы һайлай белергә, уйынсыҡтар менән айырым

(индивидуаль) уйында уҙе һәм уйынсыҡ өсөн роль башҡара белергә өйрәтеү. Балаларҙың иғтибарын, хәтерен, телмәрен, фекерләү һәләтен үҫтерeү.

**Йыһаз:** уйынсыҡ ҡайсылар, тарактар. Сәс алыусыға алъяпҡыс, уйын өсөн кәрәкле нәмәләрҙе алыштырған предметтар.

**Китапхана**

**Максат:** балаларҙы китапханасы һөнәре менән тулыраҡ таныштырыу; эш йөкмәткеһе һәм барышы менән ентекләп таныштырыу; башҡарған эштәре тураһында эҙмә-эҙлекле, бәйләнешле итеп һөйләргә өйрәтеү.

Китапҡа һаҡсыл ҡараш, һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһаз:** эш өҫтәле, китапхана өсөн кәрәкле йыһаздар: китаптар, китап кәштәһе, һәр балаға карточкалар.

**Ҡағиҙәһе:** китапханасы һайланыла. Балалар китапхананан үҙҙәренә оҡшаған китапты һайлап ала, китапханасы баланың карточкаһына «яҙа». Китаптарзы берәй төҫ йәки һан менән билдәләргә мөмкин.

**Мәктәп**

**Максат:** балаларҙы бер-береһен тыңлап, ишетә белергә өйрәтеү, уларҙы психологик яҡтан мәктәпкә әҙерләү; башҡарған эштәре тураһында эҙмә-эҙлекле, бәйләнешле итеп һөйләргә өйрәтеү.

**Йыһаз:** китаптар, һәр балаға - дәфтәр һәм ручка, портфель, таҡта, аҡбур, сюжетлы һүрәттәр, уларҙы таҡтаға йәбештереп ҡуйыр өсөн магнит киҫәктәре.

**Ҡағиҙәһе:** бөтә балалар ҙа «укытыусы» ролендә алмашлап булалар. «Дәрестәр» оҙак булмай. Тәрбиәсе үткәргән дәрестәрҙе ҡабатлау бик тә отошло була.

# ҠУЛЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ


1. Башаева Т. В. Развитие восприятия у детей. Ярославль: «Академия управления», 1997.
2. Богуславская З. М., Смирнова Е. О. Развивающие игры для детей младшего дошкольного возраста. М.: «Просвещение», 1991.
3. Бондаренко А. К. Дидактические игры в детском саду. М.: «Просвещение», 1991.
4. Выготский Л.С. игра и ее роль в психологическом развитии ребенка//Вопр.психологии.-1966,№ 6, 75 с.
5. Галиева Ғ. Ғ., Нафикова З. Ғ.. Башҡорт балалар баҡсалары өсөн уҡытыу-тәрбиә программаһы. Өфө, 1999.
6. Галауетдинов И. Ғ.. Уйнайыҡ, дуҫтар, бергәләп. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1987.
7. Косвин Г. А., Рогосовская Е. Р. Игры в детском саду. М.: Просвещение, 1987
8. Леонтьев А. Н. Психологические основы дошкольной игры // Избр. псих. соч.: В 2-х томах, М., 1983, т. 1.
9. Максаков А. И., Тумакова Г. А. Учите, играя. М.: Просвещение, 1983.
10. Маханева М. Д. Театрализованные занятия в детском саду. М., 2001.
11. Эльконин Н. . Психология игры, М., 1978.
12. Михайленко Л. Я., Короткова Н. А. Игры с правилами в дошкольном возрасте. М., 2000.
13. Коротков И.И. Подвижные игры детей. М., 1987.
14. Селайманов Э. М. Бала-сағаның уйын фольклоры. - Өфө: Китап, 2007.
15. Степанова О. А. Игровая школа мышления. М., 2003.